Муниципаль белем биреү бюджет учреждениеһы
Бала үçтереү үҙәге - «Аҡбуҙат» балалар баҡсаһы

**Байрам иртәлеге:**

# Аҡ куянда кунакта




Аҡ куянда кунакта

**Ҡатнашалар**:




**Алып барыусы-** Гөлнара Марат ҡыҙы

**Ҡуян** – Динара Әхтәм ҡыҙы

**Ҡыш бабай** – Йәнбикә Ғиниәт ҡыҙы

**Ҡарһылыу** – Зөлфиә Мәжит ҡыҙы

*Зал байрамса биҙәлгән.* Зал уртаһында шыршы ултыра. Шыршы янында бер телефон ята. Көй аҫтында ҡуян инә.

Ҡуян һикереп килдеп инә һәм телефон табып ала.

**Ҡуян**: Был нимә икән. Был бит телефон. Әйләндереп – әйләндереп ҡарай. Кем уны онотто икән был урманда, әллә юғалтып эҙләп йөрөйҙөр әле. Эһе – һей, кем бар был тирәлә. Килегеҙ әле, мин телефон таптым.

*Балалар инә* **Алып барыусы:** Һаумы ҡуян.





**Балалар**: Һаумы ҡуян

**Алып барыусы:** Ҡуян, беҙ байрамға киләбеҙ, ә һин урман яңғыратып ҡысҡыраһың.Нимә булып китте.

**Ҡуян**: Балалар, килегеҙ әле, мин телефон табып алдым. Кемдеке икән?

( шул ваҡыт телефондан шылтыратыу тауышы ишетелә, ҡуян ҡурҡа-ҡурҡа телефонды ала).

**Ҡыш бабай тауышы**: Алло, Ҡарһылыу ҡыҙым беҙҙе байрамға саҡырҙылар. Мин тиҙҙән барып етермен.

Ҡуян: балалар был бит Ҡарһылыуҙың телефоны ул хәҙер эҙләп йөрөйҙөр инде. Байрамға нисек килә инде?

**Ҡуян**: Был бит Ҡыш бабайҙың тауышы. Был Ҡарһылыуҙың телефоны икән., ул хәҙер уны эҙләп йөрөйҙөр әле.

**Алып барыусы:** Ысынлап та Ҡыш бабайҙың тауышы бит был.

**Ҡуян**: Хәҙер Ҡыш бабай ҙа Ҡарһылыу ҙа байрамға килә алмай инде.

**Алып барыусы:** Борсолма Ҡуян, балалар менән йыр йырлап алайыҡ, бәлки Ҡарһылыу беҙҙең йырҙы ишетеп килеп етер.

**“Ап-аҡ ҡына ҡар яуа” йыры**

**Алып барыусы:** Афарин, балалар, бик матур й ырланығыҙ.Ә хәҙер ултырып торайыҡ.

*Көй ишетелә.Ҡарһылыу килеп инә.*

Ҡарһылыу: Һаумыһығыҙ балалар, ҡунаҡтар. Бик матур йырлайһығыҙ икән, тауышығыҙҙы ишетеп килеп еттем, аҙашып йөрөнөм. Мин телефонымды юғалттым, һеҙ юлда күрмәнегеҙме?

*(балалар араһынан ҡуян сыға)*

**Ҡуян**: ошо түгелме? Ҡыш бабай шылтыратты.



**Ҡарһылыу:** эйе, ҡуян, ошо минең телефоным. Һиңә ҙур рәхмәт, юғалған әйберҙе хужаһына ҡайтарып биреү –ҙур батырлыҡ.

- Балаларҙың шиғырҙары (Ҡуян тураһында).

**Алып барыусы**: Балалар, әйҙәгеҙ Ҡарһылыу менән бергәләп ҡуянға арнап йыр йырлап ишеттерәйек.

***“Аҡ ҡуян” йыры***



**Ҡарһылыу**: балалар беҙҙең шыршыбыҙ бик матур. Төрлө уйынсыҡтар эленгән. Әммә Ҡыш бабай һаман килмәй.

**Алып барыусы:** әйҙәгеҙ беҙ уны саҡырайыҡ.

**Балалар**: Ҡыш бабай, Ҡыш бабай.

**Ҡыш бабай**: һаумыһығыҙ балалар, ҡунаҡтар, бигерәк матур ҡыҙҙар, шәп малайҙар йыйылған икән шыршы янына. Мин һеҙгә бүләктәр, ҡустәнәстәр килтерҙем.

**Алып барыусы**: Әйҙә,Ҡыш бабай, түрҙән үт беҙ һине һағынып көттөк.

**Ҡыш бабай**: Ҡыҙым Ҡарһылыу һин дә килеп еткәнһең бит. Мин һине урманда эҙләп йөрөнөм. Телефоның да яуап бирмәй.

**Ҡарһылыу:** Ҡыш бабай, мин телефонымды юғалтҡан инем бит, уны Ҡуян табып бирҙе.

**Ҡыш бабай**: Рәмәт ҡуян, һин ҙур батырлыҡ эшләгәнһең. Бөгөн байрам, шыршы ла матур итеп биҙәлгән

**Алып барыусы:** Әйҙә Ҡш бабай түрҙән уҙ. Балалар һеҙгә йыр, шиғыр әҙерләнеләр.

*Балалар шиғырҙары*




**Алып барыусы:** Әйҙәгеҙ, Ҡыш бабай менән Ҡарһылыуҙың бейегәнен күрәйек әле.

***Ҡыш бабай менән Ҡарһылыу бейей***

**Ҡарһылыу**: олатай һин арығанһыңдыр инде, ултырып тор, ә беҙ ҡар бөртөктөре менән бейеү бейеп алайыҡ.

**Ҡыш бабай**: рәхмәт, балалар.бик матур бейейһегеҙ икән, ә хәҙер уйнап алайыҡ, ҡуян һин миңә ярҙам ит.

**уйын “Ҡар йомғактары”**

**Алып барыусы:** Балалар, әйҙәгеҙ Ҡыш бабайға йыр йырлап ишеттерәйек.

**йыр “Ҡыш бабай”**

**Ҡыш бабай:** рәхмәт балалар, матур йырлайһығыҙ икән. Һеҙҙең менән күңелле булды,әммә беҙгә ҡайтырға ваҡыт етте, беҙҙең эштәребеҙ күп, йылға-күлдәрҙе туңдыраһы, урман-ҡырҙарҙы ҡар менән тултыраһы бар. Күстәнәстәрҙе тәрбиәселәрегеҙгә бирәм төркөмгә ҡайтҡас таратып бирерҙәр. Һау булығыҙ.

**Алып барыусы:** Яңы йыл тағы ла шатлыҡтар алып килһен. Барығыҙҙы ла яңы йыл менән!